

*Рамазан Шәғәлиев*

# АҠЫЛЛЫ КӘҢӘШСЕ, НЫҠЛЫ ТЕРӘК

Рамазан Нурғәле улы Шәғәлиев Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Мөслим ауылында тыуып үҫкән. Унын тормош биографияһы туған яҡтары — Силәбе менән айырылғыһыҙ булып үрелгән. 1954 йылда Силәбе металлургия заводында хеҙмәт юлын башлай. 1960 йылда ҡаланың металлургтар мәҙәниәт һарайында ”Айгөл” йыр һәм бейеү халыҡ ансамблен, 1962 йылда Ш.Бабич исемендәге милли китапханала Аҡмулла исемендәге (тәүҙә ул Муса Йәлил исемен йөрөтә) әҙәби берекмәне ойоштора һәм уларҙың етәксеһе була. Сирек быуатҡа яҡын тарихы булған был ижади коллективтарҙың ырамлы һәм емешле эшләп килеүе халыҡ яҙмышы хаҡындағы хәстәрлектең сағылышы ул.

Етмешенең өҫтөндә лә тынып ҡалманы Рамазан Нурғәли улы. Силәбеләге ”Айгөл” ансамбле, Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә һәм Ш.Бабич исемендәге милли китапхана менән һәр саҡ бәйләнештә, улар ойошторған сараларҙың уртаһында ҡайнап йәшәй. Әле лә уларҙың аҡыллы кәңәшсеһе һәм ныҡлы терәге булып ҡала.

Һуңғы йылдарҙа Силәбелә башҡорт китаптарының бер-бер артлы донъя күрә башлауында уның да өлөшө бар. Авторҙың ”Исемһеҙ йондоҙҙар” (Силәбе ҡалаһы, 2001 йыл) китабы яңы быуатты асып ебәргәйне, оҙаҡламай Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәнең ”Силәбе шишмәләре” (2002 йыл), ”Һөйөнсө” (2003 йыл) исемле йыйынтыҡтары баҫылды, ”Силәбе башҡорттарының әҙәби антологияһы” нәшриәткә әҙерләнде.

Яҡташтарының матди ярҙамы менән ”Аҡһаҡал кәңәштәре” (2003 йыл), Арғаяш районы хакимиәте башлығы С.Я.Наумов һәм Башҡортостан Республикаһының Силәбеләге даими вәкиле М.И.Хафизов ярҙамы менән ”Йәнлектәр донъяһында” (2004 йыл), Силәбеләге татар һәм башҡорт мәҙәни үҙәге етәксеһе Марат Ҡанафин булышлығы менән татар телендә ”Күчтәнәч” (2004 йыл) китаптары донъя күрҙе.

Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы, талантлы шағир, музыкант һәм йәмәғәт эшмәкәренең хеҙмәте хөкүмәт тарафынан да юғары баһаланды. Ул Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Ә 2002 йылда әҙәбиәт өлкәһендәге ижади уңыштары өсөн Аҡмулла исемендәге премия тапшырылды.

Беҙ, силәбеләр, әҙипкә ныҡлы һаулыҡ һәм яңы ижад уңыштары теләйбеҙ. Шағир үҙе әйтмешләй: ”Халҡыбыҙҙың талмаҫ пар ҡанаты, йүгерек аты бул!” — тибеҙ.

*Ҡамса МОРТАЗИН,*
*Акмулла исемендәге әҙәби берекмәнең яуаплы сәркәтибе*